БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫНЫҢ
“М. С. ПИНСКИЙ ИСЕМЕНДӘГЕ
83-СӨ ЛИЦЕЙ”

Закирова А.Г., Нәҙербаева Л.С.

УҠЫУСЫЛАРҒА ЯРҘАМҒА...

Методик ҡулланма

Өфө ҡалаһы –2016

УДК 82=894(07): 372/882

Рецензент: Р.Н. Кәримова

Закирова А.Г., Нәҙербаева Л.С.
Уҡыусыларға ярҙамға. Методик ҡулланма / Төҙ. Закирова А.Г, Нәҙербаева Л.С. Өфө, 2016. 62 бит.

Йыйынтыҡта таблица рәүешендә башҡорт теленең төп ҡағиҙәләре бирелә. Ҡушымта итеп терәк һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, уҡыу өсөн текстар бирелә.

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусыларға тәғәйенләнә.

УДК 82=894(07): 372/882

© Закирова А.Г., Надербаева Л.С., 2016

Башҡорт алфавиты – Башкирский алфавит

1	Аа	(а)
2	Бб	(бы)
3	Вв	(вы)
4	Гг	(гы)
5	**Ғғ**	**(ғы)**
6	Дд	(ды)
7	**Ҙҙ**	**(ҙы)**
8	Ее	(йэ)
9	Ёё	(йо)
10	Жж	(жы)
11	Зз	(зы)
12	Ии	(и)
13	Йй	(йы)
14	Кк	(кы)
15	**Ҡҡ**	**(ҡы)**
16	Лл	(лы)
17	Мм	(мы)
18	Нн	(ны)
19	**ң**	**(ңы)**
20	Оо	(о)
21	**Өө**	**(ө)**
22	Пп	(пы)
23	Рр	(ры)
24	Сс	(сы)
25	**ҫ**	**(ҫы)**
26	Тт	(ты)
27	Уу	(у)
28	**Үү**	**(ү)**
29	Фф	(фы)
30	Хх	(хы)
31	**Һһ**	**(һы)**
32	Цц	(цэ)
33	Чч	(че)
34	Шш	(шы)
35	Щщ	(ща)
36	ъ	(ҡалын айырыу билдәһе)
37	Ыы	(ы)
38	ь	(нәҙек айырыу билдәһе)
39	Ээ	(э)
40	**Әә**	**(ә)**
41	Юю	(йу)
42	Яя	(йа)

Башҡорт телендә өн һәм хәрефтәрҙе төркөмләү

Классификация букв и звуков в башкирском языке

42 **хәреф**			
9 **һуҙынҡы (гласные)**		**27** **тартынҡы (согласные)**	
ҡалын (твердые)	нәҙек (мягкие)	һаңғырау (глухие)	яңғырау (звонкие)
а, о, у, ы	**ә, ө, ү, и, е(э)**	**п, ф, к, ҡ, т, с, ҫ, ш, х, һ, ч, ц, щ**	**б, в, г, ғ, д, з, ж, ҙ, й, л, м, н, ң, р**

Дифтонг (икешәр өн): **е, ё, ю, я.**

2 өнһөҙ (не обозначают звука, выполняют разделительную функцию): **ь, ъ**

Исемдәрҙең күплек ялғауы – Окончания множественного числа имен существительных

Если корень (основа)существительного оканчивается на:	Варианты окончаний множественного числа		Примеры
	существительных с твердыми гласными	существительных с мягкими гласными	
а, ә, ы, е, о,ө	**-лар**	**-ләр**	бала**лар**- дети кеше**ләр**- дети
л, м, н, ң, з, ж	**-дар**	**-дәр**	урам**дар**- улицы күл**дәр**- озера
б, в, г, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ	**-тар**	**-тәр**	таш**тар**- камни эш**тәр**- дела
ҙ, й, р, у, ү, и	**-ҙар**	**-ҙәр**	айыу**ҙар**- медведи көй**ҙәр** - мелодии

Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше – Склонение имен существительных

	Килештәр (падежи)	Килеш һорауҙары (вопросы падежей)	Корень (основа) оканчивается на			
			а, ә, ы, е, о, ө, я	ж, з, л, м, н, ң	ҙ, й, р, у, ү, и, ю	б, в, г, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ
1	Төп – основной (именительный)	кем? кемдәр? – кто?нимә? нимәләр? – что?	-	-	-	-
2	Эйәлек – притяжательный (родительный)	кемдең? – кого? у кого? чей?нимәнең?– чего?	-ның/ -нең -ноң/ -нөң	-дың/ -дең -доң/ -дөң	-ҙың/ -ҙең -ҙоң/ -ҙөң	-тың/ -тең -тоң/ -төң
3	Төбәү – направительный (дательный)	кемгә? – кому? нимәгә? – чему?ҡайҙа? – куда?	-ға/ -гә	-ға/ -гә	-ға/ -гә	-ҡа/ -кә
4	Төшөм – винительный	кемде? – кого? нимәне? нимә? – что?	-ны/ -не –но/- нө	-ды/ -де –до/ -дө	-ҙы/ -ҙе –ҙо/ -ҙө	-ты/ -те –то/ -төө
5	Урын - ваҡыт - местно-временной	кемдә? - у кого? нимәлә? – в чем? ҡайҙа? – где?	-ла/ -лә	-да/ -дә	-ҙа/ -ҙә	-та/ -тә
6	Сығанаҡ - исходный	кемдән? – от кого? у кого? нимәнән? – от чего? ҡайҙан? – откуда?	-нан/ -нән	-дан/ -дән	-ҙан/ -ҙән	-тан/ -тән

Эйәлек төшөнсәһе – Обозначение принадлежности

Эйәлек аффикстары(ялғауҙары) Аффиксы принадлежности				
Һан - число	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на гласные	Корень (основа) оканчивается на согласные	Корень (основа) на **-о /-ө**
Берлектә (единственное число)	I зат- минең	-м	-ым/-ем	-ом/-өм
	II зат – һинең	-ң	-ың/-ең	-оң/-өң
	III зат – уның	-һы/-һе	-ы/-е	-о/-ө
Күплектә (множественное число)	I зат- беҙҙең	-быҙ/-беҙ	-ыбыҙ/-ебеҙ	-обоҙ/-өбөҙ
	II зат- һеҙҙең	-ғыҙ/-геҙ	-ығыҙ/-егеҙ	-оғоҙ/-өгөҙ
	III зат- уларҙың	-лары/-ләре	-тары/-тәре -дары/-дәре -ҙары/-ҙәре	-тары/-тәре -дары/-дәре -ҙары/-ҙәре

Һүҙ төркөмдәре – Части речи

Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре – Самостоятельные части речи		
һүҙ төркөмдәре	һорауҙары	миҫалдар
Исем	кем? нимә?	бала, ҡош
Сифат	ниндәй?	йәшел, тәмле
Һан	нисә? күпме? нисәнсе?	бер, дүртенсе
Ҡылым	ни эшләй? нимә эшләргә?	эшләй, яҙыр
Рәүеш	нисек?ни рәүешле?ҡасан?күпме?	тиҙ, элек, күп
Алмаш	Үҙе алмаштырған һүҙ төркөмөнөң һорауына яуап бирә	мин, шул

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре – Служебные части речи	
Теркәүес	ләкин, бәлки, һәм, йәки, хатта, менән
Бәйләүес	менән, өсөн, кеүек, тиклем, шикелле
Киҫәксә	ғына, ла, лә, шул, һуң

Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре – Глагол. Наклонение глагола

Инфинитив

-ырға	-ыу	юҡлыҡ формаһы (отрицательная форма) **-маҫка, -мәҫкә**
-ергә	-еү	
-рға	-у	
-ргә	-ү	
-орға	-оу	
-өргә	-өү	

Бойороҡ һөйкәлеше (повелительное наклонение)

Һан - число	Зат - лицо		
Берлектә (единственное число)	I зат- мин	не склоняется	юҡлыҡ формаһы (отрицательная форма) **-ма, -мә**
	II зат – һин	---	
	III зат - ул	-һын, -һен	
Күплектә (множественное число)	I зат- беҙ	не склоняется	
	II зат- һеҙ	-ығыҙ, -егеҙ	
	III зат- улар	-һындар, -һендәр	

Хәбәр һөйкәлеше (изъявительное наклонение)

Хәҙерге заман – Настоящее время

	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на			
		согласный		гласный	
		Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа
Единственное число	I зат- мин	+**а**+м	+**ә**+м	+**й**+ым / +**й**+ом	+**й**+ем / +**й**+өм
	II зат – һин	+**а**+һың	+**ә**+һең	+**й**+һың / +**й**+һоң	+**й**+һең / +**й**+һөң
	III зат - ул	**+а**	**+ә**	**+й**	**+й**
Множественное число	I зат- беҙ	+**а**+быҙ	+**ә**+беҙ	+**й**+быҙ/ +**й**+боҙ	+**й**+беҙ/ +**й**+бөҙ
	II зат- һеҙ	+**а**+һығыҙ	+**ә**+һегеҙ	+**й**+һығыҙ/ +**й**+һоғоҙ	+**й**+һегеҙ/ +**й**+һөгөҙ
	III зат- улар	+**а**+(лар)	+**ә**+(ләр)	+**й**+(ҙар)	+**й**+(ҙәр)
юклыҡ формаһы (отрицательная форма) **-май, -мәй**					

Билдәле киләсәк заман – Будущее определенное время

	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на			
		согласный		гласный	
		Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа
Единственное число	I зат- мин	+асаҡ+мын	+әсәк+мен	+ясаҡ+мын	+йәсәк+мен
	II зат – һин	+асаҡ+һың	+әсәк+һең	+ясаҡ+һың	+йәсәк+һең
	III зат - ул	+асаҡ	+әсәк	+ясаҡ	+йәсәк
Множественное число	I зат- беҙ	+асаҡ+быҙ	+әсәк+беҙ	+ясаҡ+быҙ	+йәсәк+беҙ
	II зат- һеҙ	+асаҡ+һығыҙ	+әсәк+һегеҙ	+ясаҡ+һығыҙ	+йәсәк+һегеҙ
	III зат- улар	+асаҡ+(тар)	+әсәк+(тәр)	+ясаҡ+(тар)	+йәсәк+(тәр)
юклыҡ формаһы (отрицательная форма) **-маясаҡ, -мәйәсәк**					

Билдәһеҙ киләсәк заман – Будущее неопределенное время

	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на			
		согласный		гласный	
		Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа
Единственное число	I зат- мин	+ыр+мын/ +ор+мон	+ер+мен/ +өр+мөн	+р+мын / +р+мон	+р+мен / +р+мөн
	II зат – һин	+ыр+һың/ +ор+һоң	+ер+һең/ +өр+һөң	+р+һың / +р+һоң	+р+һең / +р+һөң
	III зат - ул	+ыр	+ер/ +өр	+р	+р
Множественное число	I зат- беҙ	+ыр+быҙ/ +ор+боҙ	+ер+беҙ/ +өр+бөҙ	+р+быҙ/ +р+боҙ	+р+беҙ/ +р+бөҙ
	II зат- һеҙ	+ыр+һығыҙ /+ор+һоғоҙ	+ер+һегеҙ/+өр +һөгөҙ	+р+һығыҙ/ +р+һоғоҙ	+р +һегеҙ/ +р+һөгөҙ
	III зат- улар	+ыр+(ҙар)/ +ор+(ҙар)	+ер+(ҙәр)/+өр +(ҙәр)	+р+(ҙар)	+р+(ҙәр)
юклыҡ формаһы (отрицательная форма) **-маҫ, -мәҫ**					

Билдәле үткән заман – Прошедшее определенное время

	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на							
		а, о, ы	ә,ө,е,и	л, м, н, ң		у, ү, р, й,ҙ			
		Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа
Единственное число	I зат-мин	+ны+м/ +но+м	+не+м/ +нө+м	+ды+м +до+м	+де+м / +дө+м	+зы+м +зо+м	+зе+м / +зө+м	+ты+м +то+м	+те+м / +тө+м
	II зат –һин	+ны+ң +но+ң	+не+ң/ +нө+ң	+ды+ң / +до+ң	+де+ң / +дө+ң	+зы+ң / +зо+ң	+зе+ң / +зө+ң	+ты+ң / +то+ң	+те+ң / +тө+ң
	III зат - ул	+ны +но	+не/ +нө	+ды +до	+де +дө	+зы +зо	+зе +зө	+ты +то	+те +тө
Множественное число	I зат-беҙ	+ны+к +но+к	+не+к +нө+к	+ды+к +до+к	+де+к +дө+к	+зы+ҡ +зо+ҡ	+зе+к +зө+к	+ты+к +то+ҡ	+те+к +тө+к
	II зат-һеҙ	+ны+ғыҙ + но+ғоҙ	+не+ғеҙ +нө+гөҙ	+ды+ғыҙ +до+ғоҙ	+де +ғеҙ +дө+гөҙ	+зы+ғыҙ +зо+ғоҙ	+зе +ғеҙ +зө+гөҙ	+ты+ғыҙ +то+ғоҙ	+те +ғеҙ +тө+гөҙ
	III зат-улар	+ны+(лар) +но+(лар)	+не+(ләр) +нө+(ләр)	+ды+(лар) +до+(лар)	+де+(ләр) +дө+(ләр)	+зы+(лар) +зо+(лар)	+зе+(ләр) +зө+(ләр)	+ты+(лар) +то+(лар)	+те+(ләр) +тө+(ләр)
юклыҡ формаһы (отрицательная форма) **-маны, -мәне**									

Билдәһеҙ үткән заман – Прошедшее неопределенное время

	Зат - лицо	Корень (основа) оканчивается на			
		а-ә, о-ө, у-ү, ы-е, и, л, м, н, ң, р, й, ҙ		к, ҡ, п, с, ҫ, т, ш	
		Твердая основа	Мягкая основа	Твердая основа	Мягкая основа
Единственное число	I зат- мин	+ған+мын	+гән+мен	+ҡан+мын	+кән+мен
	II зат – һин	+ған+һың	+гән+һең	+ҡан+һың	+кән +һең
	III зат - ул	+ған	+гән	+ҡан	+кән
Множественное число	I зат- беҙ	+ған+бығ	+гән+беҙ	+ҡан+бығ	+кән+беҙ
	II зат- һеҙ	+ған+һығыҙ	+гән+һегеҙ	+ҡан+һығыҙ	+кән+һегеҙ
	III зат- улар	+ған+(дар)	+гән+(дәр)	+ҡан+(дар)	+кән+(дәр)
юҡлыҡ формаһы (отрицательная форма) **-маған, -мәгән**					

Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибе

Порядок слов в простом предложении

В башкирском языке порядок слов в предложении обычно такой: подлежащее, второстепенные члены (состав сказуемого), сказуемое:

Кояш нурҙарын һибә. "Солнце брызгает лучи".

Определение стоит перед определяемом словом:

Кояш алтын нурҙарын һибә. "Солнце брызгает золотые лучи".

По значению относящиеся ко всему предложению обстоятельства стоят в начале предложения: *Иртәнсәк ҡояш алтын нурҙарын һибә. "Утром солнце брызгает золотые лучи".*

Члены предложения, на которые падает логическое ударение, стоят перед сказуемым: *Кояш нурҙарын иртәнсәк һибә. "Солнце брызгает золотые лучи утром".*

Сингармонизм законы – Закон сингармонизма

В башкирском языке есть **закон сингармонизма** (гармония гласных звуков): характер гласного в корне сохраняется при добавлении к слову аффиксов.

Все аффиксы подчиняются закону сингармонизма. Соответственно, практически все аффиксы и частицы имеют два варианта: твердый или мягкий.

Если в корне (основе) слова имеется хотя бы одна из твердых гласных [**а, о, у, ы**] и дифтонгов **[ё(йо), ю(йу), я(йа)],** то к нему присоединяются аффиксы и частицы только с твердой гласной.

ҡалал**ар** – города	бар**мы**? – есть?
әсәй**ҙе** – маму	килде**ме?** – пришел? (приехал?)

Примечание!

К заимствованным словам присоединяются аффиксы только с твердой гласной:

Рим**да** йәшәй. – Живет в Риме.

Яңы фильм**ды** ҡараныңмы? – Смотрел новый фильм?

Алмаш – Местоимение

Я	Мин	**Меня**	Мине
Ты	Һин	**Тебя**	Һине
Он, Она	Ул	**Его, ее**	Уны
Мы	Беҙ	**Нас**	Беҙҙе
Вы	Һеҙ	**Вас**	Һеҙҙе
Они	Улар	**Их**	Уларҙы
Мне	Миңә	**Мое**	Минең
Тебе	Һиңә	**Твое**	Һинең
Ему, ей	Уға	**Его, ее**	Уның
Нам	Безгә	**Наши**	Беҙҙең
Вам	Һеҙгә	**Ваши**	Һеҙҙең
Им	Уларға	**Их**	Уларҙың

Зат алмаштарының килеш менән үзгәреше – Склонение личных местоимений

	Килештәр (падежи)	Берлектә (единственное число)		
1	Төп – основной (именительный)	мин - я	һин - ты	ул - он
2	Эйәлек – притяжательный (родительный)	минең – у меня	һинең – у тебя	уның – у него
3	Төбәү – направительный (дательный)	миңә - мне	һиңә - тебе	уға - ему
4	Төшөм – винительный	мине - меня	һине - тебя	уны - его
5	Урын - ваҡыт - местно-временной	миндә – у меня	һиндә – у тебя	унда – у него
6	Сығанаҡ - исходный	минән – от меня	һинән – от тебя	унан – от него

	Килештәр (падежи)	Күплектә (множественное число)		
1	Төп – основной (именительный)	беҙ - мы	һеҙ - вы	улар - они
2	Эйәлек – притяжательный (родительный)	беҙҙең – у нас	һеҙҙең – у вас	уларҙың – у них
3	Төбәү – направительный (дательный)	беҙгә – к нам	һеҙгә – к вам	уларға - им
4	Төшөм – винительный	беҙҙе - нас	һеҙҙе - вас	уларҙы - их
5	Урын - ваҡыт - местно-временной	беҙҙә – у нас	һеҙҙә – у вас	уларҙа – у них
6	Сығанаҡ - исходный	беҙҙән – от нас	һеҙҙән – от вас	уларҙан – от них

Һандар – Числа

0	нуль	**30**	утыҙ
1	бер	**40**	ҡырҡ
2	ике	**50**	илле
3	өс	**60**	алтмыш
4	дүрт	**70**	етмеш
5	биш	**80**	һикһән
6	алты	**90**	туҡһан
7	ете	**100**	йөҙ
8	һигеҙ	**101**	йөҙ ҙә бер
9	туғыҙ	**200**	ике йөҙ
10	ун	**300**	өс йөҙ
11	ун бер	**400**	дүрт йөҙ
12	ун ике	**500**	бищ йөҙ
13	ун өс	**600**	алты йөҙ
14	ун дүрт	**700**	ете йөҙ
15	ун биш	**800**	һигеҙ йөҙ
16	ун алты	**900**	туғыҙ йөҙ
17	ун ете	**1000**	мең
18	ун һигеҙ	**2000**	ике мең
19	ун туғыҙ	**3000**	өс мең
20	егерме	**10 000**	ун мең
21	егерме бер	**100 000**	йөҙ мең
22	егерме ике	**1 000 000**	бер миллион

Аҙна көндәре – Дни недели

Понедельник	Дүшәмбе
Вторник	Шишәмбе
Среда	Шаршамбы
Четверг	Кесаҙна
Пятница	Йома
Суббота	Шәмбе
Воскресенье	Йәкшәмбе

Сәләмләү – Приветствие

Рәхим итегеҙ!	Добро пожаловать!
Һаумыһығыҙ!	Здравствуйте!
Сәләм!	Привет!
Хәйерле иртә!	Доброе утро!
Хәйерле, яҡшы, шәфҡәтле	Добрый
Иртә	Утро
Хәйерле көн!	Добрый день!
Көн	День
Хәйерле кис!	Добрый вечер!
Кис	Вечер
Һеҙҙе күреүемә бик шатмын!	Рад(а) Вас видеть!
Шатмын	Рад (а)
Күрергә	Видеть
Хәлдәрегеҙ / эштәрегеҙ нисек?	Как дела?
Хәлдәр / эштәр	Дела
Һеҙҙең һаулығығыҙ нисек?	Как Ваше здоровье?
Һаулыҡ	Здоровье
Ғаиләгеҙ ни хәлдә?	Как Ваша семья?
Ғаилә	Семья

Хушлашыу – Прощание

Һау булығыҙ!	До свидание!
Иртәгәгә тиклем!	До завтра!
Осрашҡанға тиклем!	До встречи!
Осрашыу	Встреча
Хушығыҙ!	Прощайте!
Яңынан осрашҡанға тиклем!	До новой встречи!
Яңы	Новый
Иң яҡшы теләктәр!	Всего хорошего!
Теләктәр	Пожелания
Иң изге теләктәр!	Всего доброго!
Беҙҙе онотмағыҙ, хат яҙығыҙ, шылтыратығыҙ!	Не забывайте нас, пишите, звоните!
Яҙығыҙ	Пишите
Хат	Письмо
Иртәгә күрешербеҙ	Увидимся завтра
Күрешербеҙ әле!	Увидимся еще!
Хәйерле юл!	Счастливого пути!
Имен- һау барып етегеҙ!	Счастливо Вам доехать!
... сәләм тапшырығыҙ	Передайте привет...
Килеп йөрөгөҙ	Приезжайте(приходите)
Бик шат булырбыҙ!	Будем очень рады!
Беҙ һеҙҙе (бик) көтәбеҙ!	Мы Вас очень ждем!
Беҙ һеҙҙе бик яратабыҙ!	Мы Вас очень любим!
Миңә китергә ваҡыт. Мин китәм	Мне пора. Я пойду
Үкенескә ҡаршы, айырылышырға ваҡыт	К сожалению, пора расставаться
Тыныс йоҡо!	Спокойной ночи!

Танышыу – Знакомство

Һеҙҙең исемегеҙ нисек?	Как Вас зовут? Как Ваше имя?
Нисек ?	Как ?
Исем	Имя
Исемләргә, атарға	Звать, называть
Һеҙҙең менән танышырға мөмкинме?	Можно с Вами познакомиться?
Мөмкинме	Можно
Һеҙҙең менән	С вами
Танышырға	Познакомиться
Мин һеҙҙең менән танышырға теләйем	Я хочу с Вами познакомиться
Теләйем (теләргә)	Хочу (хотеть)
Һеҙҙең менән танышырға рөхсәт итегеҙ!	Позвольте представиться!
Рөхсәт итегеҙ	Разрешите, позвольте
Таныш булайыҡ! Минең исемем...	Будем знакомы! Меня зовут...
Һеҙҙең менән танышыуға бик шатмын!	Очень рад(а) с Вами познакомиться
Ҡасан килдегеҙ?	Когда приехали?
Ҡасан	Когда
Килдегеҙ (килергә)	Приехали (приехать)
Минең дуҫым (ирем, ҡатыным) менән таныштырырға рөхсәт итегеҙ!	Разрешите представить моего друга (мужа, жену)!
Дуҫ	Друг
Ир	Муж
Ҡатын	Жена
Таныштырам	Познакомлю
Ғаилә менән	С семьей
Өфөлә йәшәйһегеҙме?	В Уфе живете?
Ҡайҙа	Где
Һеҙгә (һиңә) нисә йәш?	Вам (тебе) сколько лет?

Нисә	Сколько
Йәш	Лет
Миңә утыз йәш	Мне 30 лет
Һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ?	Где вы живете?
Йәшәйһегеҙ (йәшәргә)	Живете (жить)
Мин ҡалала (ауылда) йәшәйем	Живу в городе (в деревне)
Ҡалала	В городе
Кәйефең нисек?	Как настроение?
Кәйеф	Настроение
Рәхмәт	Спасибо
Эйе	Да
Юҡ	нет
Бик һәйбәт (бик шәп түгел)	Очень хорошо (не очень хорошо)
Һәйбәт	Хорошо
Хәтерләмәйем	Не помню
Бик яҡшы хәтерләйем	Очень хорошо помню
Хәтерләйем (хәтерләргә)	Помню (помнить)
Үтегеҙ, уҙығыҙ	Проходите
Бер класта уҡыныҡ	Учились в одном классе
Уҡыныҡ (уҡырға)	Учились (учиться)
Класта	В классе
Һеҙҙең турала мин күп ишеткәнем бар	Я много слышал о Вас
Күп	Много
Һеҙҙең турала	О Вас
Ишетеп беләм	Знаю, слышал
Беләм	Знаю
Ишеттем (ишетергә)	Слышал (слышать)

Үтенес – Просьба

Минең һеҙгә үтенесем бар ине...	У меня есть к Вам просьба...
Минең	У меня
Һеҙгә	К Вам
Үтенес	Просьба
Әгәр һеҙгә ҡыйын булмаһа...	Если Вам не трудно...
Әгәр	Если
Ҡыйын, ауыр	Трудно
Ауырһынмаһығыҙ... (ҡыйын булмаһа)...	Есла Вас не затруднит...
Зинһар... саҡырығыҙ әле...	Пригласите, пожалуйста...
Саҡырығыҙ	Пригласите
Зинһар	Пожалуйста
Рөхсәт итегеҙ	Разрешите, позвольте
Зинһар, керегеҙ!	Пожалуйста, заходите!
Керегеҙ (керергә, инергә)	Заходите (зайти)
Һеҙҙән һорарға мөмкинме?	Можно Вас спросить?
Һорарға	Спросить
Барып килегеҙ әле, зинһар	Сходите, пожалуйста
Барып килегеҙ	Сходите
Һуңламағыҙ!	Не опаздывайте!
Зинһар, онота күрмәгеҙ!	Пожалуйста, не забудьте!

Вәкыт – Время

Вәкыт күпме? Сәғәт нисә?	Сколько время?
Сәғәт биш (сәғәт теүәл биш)	Пять часов (ровно пять часов)
Сәғәт	Часы
Ун минуттан биш	Без десяти пять
Былтыр	В прошлом году
Быйыл	В этом году
Стена сәғәте	Настенные часы
Сәғәт телдәре	Стрелки часов
Ҡул сәғәте	Наручные часы
Сәғәт туҡтаған	Часы стоят
Сәғәт алға китә	Часы спешат
Вәкытында килергә	Вовремя приходить/прийти
Вәкытында	Вовремя
Һуңлап килергә	С опозданием приходить/прийти
Бөгөн	Сегодня
Кисә	Вчера
Иртәгә	Завтра
Аҙна көндәре	Дни недели
Аҙна	Неделя
Ял көнө	Выходной день
Бөгөн нисәһе?	Какое сегодня число?
Һеҙ ҡасан киләһегеҙ?	Когда Вы приедите?
Иртәгә (бөгөн, бер аҙнанан, бер айҙан, бер йылдан)	Завтра (сегодня, через неделю, через месяц, через год)
Эш сәғәте дүрттә бөтә (тамамлана)	Работа заканчивается в четыре часа
Бөгөн байрам	Сегодня праздник
Мин бөгөн һуң (иртә) ҡайтам	Я вернусь сегодня поздно (рано)

Тел – Язык

Һөйләргә	Говорить
Зинһар, әйтегеҙ әле	Скажите пожалуйста
Үкенескә ҡаршы	К сожалению
Аңларға	Понимать
Ул нимә тине(тип әйтте)?	Что он (она) сказал (а)?
Әйтергә	Сказать
Һеҙ мине аңлайһығыҙмы?	Вы меня понимаете?
Мин һеҙҙе аңланым	Я Вас понял
Тағы ла ҡабатлағыҙ әле	Повторите, пожалуйста, еще раз
Ҡабатларға	Повторить
Был һүҙ нисек әйтелә?	Как произносится это слово?
Һеҙ башҡорт телен беләһегеҙме?	Знаете ли Вы башкирский язык?
Ошо һүҙҙе башҡортса яҙығыҙ әле, зинһар	Напишите, пожалуйста, это слово на башкирском языке
Һһеҙ инглиз телен өйрәнәһегеҙме?	Изучете ли Вы английский язык?
Мин башҡорт (инглиз) телен өйрәнәм	Я изучаю башкирский (английский) язык
Мин дөрөҫ әйтәммe?	Правильно ли я говорю(произношу)?
Дөрөҫ	Правильно

Обьект исемдәре – Названия обьектов

Янғантау	Гора Янгантау
Тау	Гора
Ҡорғазаҡ шишмәһе	Источник Кургазак
Шишмә	Источник
Малаяҙ ауылы	Село Малояз
Байым ауылы	Деревня Баим
Салауат Юлаев мәмерйәһе	Пещера Салавата Юлаева
Мәмерйә	Пещера
Шифахана	Санаторий
Быу дауаханаһы	Паровая лечебница
Быу	Пар
Дауахана	Лечебница
Лəм шифаханаһы	Грязелечебница
Лəм, бысраҡ	Грязь
Һыу дауаханаһы	Водолечебница
Дауалау – һауыҡтырыу комплексы	Лечебно- оздоровительный комплекс
Ат спорты комплексы	Конно- спортивный комплекс
Ат	Конь, лошадь
Ял итеү үҙәге	Центр досуга
Китапхана	Библиотека
Ашхана	Столовая
Бөҙрәхана	Парикмахерская
Бәҙрәф	Туалет
Дарыухана	Аптека
Табип, врач	Врач
Шәфҡәт туташы	Медсестра

Мөрәжәғәт итеү – Обращение

Ҡәҙерле дуҫтар!	Дорогие друзья!
Ҡәҙерле	Дорогие
Дустар	Друзья
Хөрмәтле хеҙмәттәштәр!	Уважаемые коллеги!
Хөрмәтле	Уважаемые
Хеҙмәттәштәр	Коллеги
Иптәштәр!	Товарищи!
Әфәнделәр!	Господа!
Йәш кеше! Егет кеше!	Молодой человек!
Йәш	Молодой
Кеше	Человек
Егеттәр!	Ребята!
Балалар!	Дети!
Туғандар!	Родственники!
Таныштар!	Знакомые!
Әсәй! Әсәкәйем!	Мама! Мамочка!
Атай! Атаҡайым!	Папа! Папочка!
Өләсәй!	Бабушка!
Олатай!	Дедушка!
Ағай!	Старший брат!
Ҡусты!	Младший брат!
Апай!	Старшая сестра!
Һеңле!	Младшая сестра!
Инәй!	Тетя!
Бабай!	Дядя!

Төҫтәр – Цвета

аҡ	белый
йәшел	зеленый
күк	синий
зәңгәр	голубой
көрән күк	фиолетовый
ҡыҙыл	красный
ҡыҙғылт һары	оранжевый
һары	желтый
һоро	серый
көрән	коричневый
ҡара	черный

ЭШ ӨСӨН ТЕКСТАР

Өс айыу

Бер ҡыҙ урманға сығып киткән. Урманда ул аҙашҡан. Бер өйгә барып юлыҡҡан. Өйҙә өс айыу йәшәгән. Береһе – ата айыу, икенсеһе – инә айыу, өсөнсөһө айыу балаһы икән.

Ҡыҙ, өйгә ингәс тә, өс туҫтаҡ аш торғанын күргән. Ул, иң зур ҡалаҡ алып, башта иң зур туҫтаҡтан, һуңынан уртансыһынан һәм аҙаҡ бәләкәсенән ашаған.

Ҡыҙҙың ултырғыһы килеп киткән. Ҡараһа, өс ултырғыс тора. Иң зурына меңһә, йығылып төшкән; уртансыһына ултырһа, уңайһыҙ икән; аҙаҡтан бәләкәсенә ултырһа – шул тиклем рәхәт икән. Ашап туйғас, ҡыҙ икенсе бүлмәгә ингән. Унда өс карауат торған. Иң бәләкәсенә ятҡан да йоҡлаған.

Айыуҙар өйҙәренә асығып ҡайтҡан һәм төшкө аш ашарға теләгән. Ҡараһалар – туҫтаҡтары буш. Ултырам тиһәләр – кемдер ултырғыстарына ултырып киткән.

Айыуҙар икенсе үҙәмәләренә ингән. Йоҡларға ятырға теләһәләр, кемдер карауаттарында аунап өлгөргән.

Ҡапыл айыу балаһы, үҙенең карауатында ҡыҙыҡайҙы күреп ҡалып, сыйылдай башлаған. Ҡыҙ күҙен асып ҡараһа, айыуҙарҙы күргән. Шунда уҡ тәҙрәгә ташланған. Тәҙрә асыҡ булған, ул һикереп меңгән дә ҡасҡан.

1. **Словарная работа, переведите:** *туҫтаҡ, йығылыу, уңайһыҙ, буш, карауат, сыйылдау, тәҙрә.*
2. **Запишите числительные словами:** *14, 57, 368, 869, 2015, 19658*
3. **Напишите существительные во множественном числе**: *ҡыҙ, айыу, ҡалаҡ, бүлмә, карауат, бала, күҙ, тәҙрә.*

Батырлыҡ

Айнур, урамдан үҡтереп барғанда, бер өйҙән ҡуйы төтөн урғылғанын күреп ҡала.Ул шул яҡҡа йүгерә. Килеп еткәндә, өйҙә ялҡын уратып алған ине.

Халыҡ эштә. Салауат өй тирәләй йүгергеләй. Уның өйҙә ике йәшлек ҡустыһы ҡалған икән.

Айнур, ярҙам килгәнсе, өй эсенә инеп өлгөрә. Саҡырған тауышҡа бала яуап бирмәй. Ул карауат аҫтында ятҡан була.

Айнурҙы ялҡын ялмай. Ул ҡулдарҙы өтөп ала. Ут һүндереүселәр килеп еткәндә, Айнур баланы ҡотҡарып өлгөргән була. Уны һәр саҡ маҡтап телгә алалар.

1. **Переведите слова:** *төтөн, ялҡын, халыҡ, ярҙам, тауыш, ут һүндереүсе, маҡтау.*
2. **“Слова заблудились”:** *а) Ҡотҡара, бала, Айнур. б) Онотмайҙар, Айнурҙың, батырлығын.*
3. **Поставь слова во множественном числе:** *урам, өй, халыҡ, тауыш, ҡул, бала.*
4. **Выпиши слова, отвечающие на вопрос** *ни эшләй?*

Көҙ уртаһы

Октябрь айы – көҙ уртаһы иҫәпләнә. Октябрь айында ағастар яланғаслана, көн һыуыта башлай. Ямғырҙар йыш яуа. Шуға ла халыҡ уны быҫраҡ ай тип йөрөтә. Һуңғы күсмә ҡоштар көньяҡҡа осоп бөтә. Ҡышлаусы ҡоштар, аҙыҡ эҙләп, ауыл тирәһенә яҡыныраҡ килә.

Йәнлектәр, ҡоштар ҡышҡылыҡҡа әҙерләнә. Туҙбаш һәм ҡара йыландар, тәлмәрйендәр аулаҡ урындарға йәшеренеп, ҡышҡы йоҡоға тала. Айыу һәм бурһыҡ көҙ көнө шул тиклем һимерә, уларҙың майы ҡыш буйына үҙҙәренең өңөндә тыныс йоҡларға етә.

Октябрҙә тәбиғәт һаҡсылары – урмансыларға эш арта. Улар йәш ағастар ултырта, төрлө орлоҡтар йыя.

Баҡсасылар ҙа ҡыҙыу эш менән мәшғүл. Улар емеш ағастарын бәйләй, олондарын ағарта, төптәрен ҡаҙа.

1. **Переведите текст.**
2. **Выпиши из текста слова во множественном числе**.
3. **Ответь на вопросы**.

** Көҙ уртаһы ҡайһы айҙа була?*
** Көҙ уртаһында нимәләр була?*
** Йәнлектәр һәм ҡоштар нимәгә әҙерләнә?*
**Йылан һәм төлмәрйендәр ҡайҙа була?*
**Айыу һәм бурһыҡ нимә эшләй?*
**Урмансылар һәм баҡсасылар ниндәй эштәр башҡара?*

4. «Буквы заблудились» – *рйәмәелтн, ҡорол, аҡасб, саға.*

Зарарлы тәмәке

Тәмәке тартыуҙың зыяны иҫ киткес ҙур. Уның төтөнө тартыусының үҙен генә түгел, һулаусыны ла ағыулай. Дүрт сәғәт буйына елләтелмәгән бүлмәлә тәмәкеселәр менән бергә ҡалған кешенең төкөрөгөндә ун дана тәмәке тартҡан кешелә булған тиклем никотин тигән ағыу туплана. Ул ағыу кешенең ғүмерен ҡыҫҡарта.

Тәмәке төтөнө арҡаһында кешеләр астма, үпкә шеше һәм башҡа шундай тын юлы сирҙәре менән ауырый. Тәмәкесе ҡатындарҙың 65 процентының балаһы зәғиф булып тыуа.

Мәктәп йылдарында, бигерәк тә башланғыс синыфтарҙа уҡ, тәмәке тарта башлаған малай, ҡыҙҙар йәштән ҡан тамыры, йөрәк сирҙәренә дусар була. Сит илдәрҙә лә, һуңғы йылдарҙа бөҙҙең илдә лә, етәкселәр эш урынына тәмәке тартмаусыларҙы ғына һайларға тырыша. Тимәк, йәштән тәмәке менән дуҫлашыу йәмғиәт алдындағы абруйҙы ла кәметә.

1. **Переведите текст.**
2. **Ответьте на вопросы:**

**Тәмәке тартыуҙың зыяны ниндәй?*
****Тәмәке төтөнө арҡаһында ниндәй ауырыуҙар барлыҡҡа килә?***

3. Составь словосочетания: *тәмәке, малай, ғүмер, бүлмә, ағыу.*
4. Выпиши из текста слова во множественном числе.
5. Выпиши из текста слова по теме «Мәктәп».

Әсәйгә әйтмәҫһең

Мараттың әсәһе магазинға киткәйне.

Марат өс йәшлек һеңлеһе менән өйҙә ҡалды. Ул ҡыҙыҡ уйын уйлап сығарырға булды. Тартманан уйынсыҡ айыу балаһын алды ла бесәйҙең ҡойроғона бәйләне.

Гүзәл көлөп ебәрҙе. Марат бесәйҙе изәнгә ҡыуып төшөрҙө, ҡыуалап йөрөтә башланы. Бесәй ҡурҡышынан өҫтәлгә, унан шкаф башына менде. Шкафтан комод өҫтөнә һикереүе булды, ваза өҫтәлгә төшөп селпәрәмә килде.

Марат ваза ватыҡтарын йыйып, урамға сығарып ташланы. Ул һеңлеһенә вазаның ватылғанын әсәһенә әйтмәҫкә ҡушты ла, туңдырма алып бирергә вәғәҙә бирҙе. Һеңлеһе риза булды. Әсәһе ҡайтҡас, ул: «Әсәй, ағайым менән бесәй вазаны ватманылар. Ағайым миңә туңдырма алып бирергә вәғәҙә бирҙе», – тине.

1. **Переведите текст**.
2. **Спиши, вставляя вместо точек пропущенные буквы**.

Һе.ле, әс.й, өл.сәй, ол.тай, е.ән, ейәнсә., ат.й, .артәсәй, ҡу.ты.

3.**Из данных слов составь предложения.**

**Уйнай, бесәй, Марат, менән.*
**Магазинға, китте, әсәй.*
**Өйҙә, ултыра, һеңлем.*

4. **Напиши глаголы в отрицательной форме:** *ҡал, кит, уйна, бөтә, йөрөй, менә, ташланы.*

5. Выпиши слова, отвечающие на вопрос **кем? нимә?**

Хушлашыу

Лагерҙағы хушлашыу усағы мәңге хәтеремдә ҡалды. Уға беҙ бер нисә көн әҙерләндек. Бейеү, йыр өйрәндек, карнавалға костюмдар эшләнек.

Көткән көн килеп етте, эңер төштө, күҙ бәйләнә башланы. Тантана минуттары яҡынайғандан-яҡыная. Борғо тауышы яңғыраны. Беҙ футбол майҙанына түңәрәкләп теҙелдек. Уртаға бейек итеп утын өйөлгән. Лагерҙағы иң булдыҡлы малайҙар усаҡ тоҡандырҙы. Ялҡын юғары үрләй, тирә-яҡ көндөҙгө кеүек яҡты булып китте. Йәшел сиҙәмгә осҡондар осоп төшә. Тауышланып фейерверк уттары һауаға тарала, шарҙар оса, бейектә-бейектә ракета уттары йымылдай.

Бөтә балалар ҙа маскарад костюмдарын кейгән. Беҙ оҙаҡ бейенек, йырланыҡ. Унан күңелле концерт башланды.

Бөгөнгө кис һис шикһеҙ минең хәтеремдә мәңге һаҡланасаҡ.

1. **Переведите текст**.
2. **Найдите глаголы, определите их время, лицо.**
3. **Выпишите из текста слова во множественном числе.**

Сауҙагәр менән крәҫтиән
(Башҡорт халыҡ әкиәте)

Бер сауҙагәр ете йөҙ һум аҡса һын юғалтҡан. Эҙләп хәле бөткәс: «Кем таба, уға йөҙ һумын бирәм»,- тигән.

Бер крәҫтиән, аҡсаны табып, теүәл генә көйө сауҙагәргә килтергән. Тегеһе бик ҡыуанған, ти. Ләкин вәғәҙә иткән йөҙ һумын биргеһе килмәй ик ән быныҢ. Хәйлә ҡора башлаған.

- Мин һигеҙ йөҙ һум юғалтҡайным. Үҙеңә тейешле бер йөҙ һумды алғанһың икән, яҡшы булған. Һиңә ҙур рәхмәт, – тигән дә аҡсаны кеҫәһенә һалып та ҡуйған.

– Юҡ, мин ете йөҙ һум таптым, теүәл килеш һиңә килтерҙем, – ти икән крәҫтиән.

— Әйҙә, судьяға барайыҡ, улай булғас, — ти икән сауҙагәр, үҙе эстән генә: “Судья минең кеүек бай кешегә ышанмай, һиңә ышанмаҫ инде”, — тип уйлай, ти. Судья янына килгәс, сауҙагәр:

— Мин юғалтҡан аҡса һигеҙ йөҙ һум ине, был крәҫтиән бер йөҙөн үҙенә алған, - тип ныҡышыуын белгән, ти.

— Юҡ. Мин ете йөҙ һум таптым да теүәл көйөнсә ошо сауҙагәргә бирҙем, - ти икән крәҫтиән.

Судья быларҙы тыңлап торған-торған да шундай хөкөм сығарған, ти.

— Һеҙҙең берегеҙ һигеҙ йөҙ һум юғалтҡан. Икенсегеҙ ете йөҙ һум тапҡан. Тимәк, табылған аҡса башҡа кешенеке. Шулай булғас, эйәһе сыҡҡанға тиклем, крәҫтиән ағай, һин тапҡан аҡсаңды үҙеңдә йөрөтөп тор. Ә һин, сауҙагәр ағай, һигеҙ йөҙ һум аҡсаң табылғансы сабыр ит, тигән ти.

Ҡомһоҙ сауҙагәр бөтөнләй аҡсаһыҙ тороп ҡалған ти.

1. **Переведите текст.**
2. **Найдите переводы слов:**

А)Акса, тин, һум, ал, бир, түлә, үлсә, ҡыйбат, очоҙ.

Б)Дешево, деньги, бери, взвесь, дай, рубль, копейка, плати, дорого.

3. Знаете ли вы?

Белеүебеҙсә, һәр илдең үҙ аҡса берәмеге бар. Беҙҙә, мәҫәлән, һум. Италияла –.., Испанияла –..,Германияла –.., Францияла –.., Украинала –.., Мексикала –.., Бразилияла – ... Күрәһегеҙ, һәр илдең үҙ аҡсаһы, йәғни, валютаһы.

1. Рәилдең йырлағыһы килә

Рәилдең йырлағыһы килә
Көн матур булғанға (ме, мы)?
Ҡулында (ғы, ге) гөл-сәскә (гә, ға)
Күбәләк ҡунғанға(мы, ме)?
Әл (лә, ла) өҫтөндә(ге, ғы) кейем
Өр-яңы булғанғанға (ме, мы)?
Әл (дә, да) инде Рәилд (дың, дең)
Шатлы (ғы, ге) ҙур булған (гә, ға).
Сентябрҙ (ең, ың) ҡыңғырау (лы, ле)
Гүзәл таңы тыуған (гә, ға).
Үҙең бөгөн тәү (ғы, ге) тапҡыр
Уҡыу (се, сы) итеп тойған (ға, гә).

2.Дайте правильный ответ

Да Нет

Мостай Кәрим – рәссам
Заһир Исмәғилев – яҙыусы
Шәйехзада Бабич – шағир
Һәҙиә Дәүләтшина – яҙыусы
Зәйнәб Биишева – актриса
Мөхәмәтша Буранғолов – фольклор йыйыусы
Рәми Ғарипов – артист
Арыҫлан Мөбәрәков – актёр

Уҡыу өсөн текстар.

Бөгөнгө көндә экономист, юрист, бухгалтер һөнәрҙәре киң таралған. Әммә хеҙмәт китабына "Титестер», «Грумер» тигән ят йәки «Туп йыйыусы» кеүек сәйер исемле эш вазифалары буйынса теркәлгән кешеләр ҙә бар. Кемдәр икән һуң был серле хеҙмәткәрҙәр?

Титестер — сәйҙең ниндәй төҫтә, ниндәй тәмгә эйә буласағын билдәләүсе кеше, ҡыҫҡаһы, сәй тәмләүсе. Башта титестер сәй ҡуләне япрағының, аҙаҡ киптерелгән әҙер массаның, һуңынан ғына шыйыҡсаның сифатын тикшерә. Ошондай ҡатмарлы күҙәтеү аҫтында әҙерләнгән сәй генә юғары сифатҡа дәғүә итә ала.

Грумер «Эт парикмахеры» тип атала ла, был һөнәр эйәһенең даими клиенттары иҫәбенә бесәй, ҡуян һәм башҡа өй хайуандары ла инә. Грумерҙар кескәй дуҫтарыбыҙҙың йөндәрен ҡырҡып ҡына ҡалмай, теш таҙартыу, тырнаҡ киҫеү кеүек гигиена тәрбиә эшен дә алып бара.

Хыял һатыусы . Чикагонан бер компанияһы клиенттарының баш етмәҫлек хыялдарын тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнә. Быныҡ өсөн офисҡа килеп, теләгең тураһында һөйләп, килешелгән аҡсаларҙы түләү ҙә етә. Тик бындай «бюро» һирәктәргә генә тәтей, сөнки бер хыялдың хаҡы кәмендә 150000 доллар.

Туп йыйыусы. Бындай вакансияларҙы ҙур гольф -клубтарҙа ғына осратырға мөмкин. Туп йыйыусыларҙың бурысы—уйын яланын туптарҙан таҙартыу.

Постижер. Актёрға ролде кәүҙәләп дереү өсөн ҡаралған парик, мыйыҡ, һаҡал һ.б. яһаусы театр оҫтаһы, әммә әлеге Рәсәйҙә был һөнәрҙең серҙәрен аҫкан уҡыу йорто юҡ, шуға ла һәр театр ошо өлкә буйынса туплаған тәжрибәһен быуындан-быуынға ҡалдырыла.

Клакер. Бынан 2,5 мең йыл элек драматург, аҡса түләп йыйылған бер төркөм кешенән ижадташ дуҫын көслө алҡыштарға күмдергән. Бөгөнгө көндә дә ялланған тамашасы ошо исем менән йөрөтөлә.

Тыңлаусы. Токио ҡалаһының урамдарында «Мин һине тыңлайым» тигән яҙыу тотҡан кешеләрҙе осратырға мөмкин. Улар һинең бар хәбәреңде тыңлап, йылмайып оҙатып ҡала, әммә кәңәш бирмәй.

1.Прочитайте текст
2.Переведите 1-3 абзац
3.Составьте 3 вопроса.

Һаңғыраулыҡ ағас башынан йөрөмәй

Әгәр бер нисә йыл элек ишетеү һәләтенең насарайыуына, йәки һаңғырауланыуға тик өлкән кешеләр, күпселек осраҡта көслө шау-шыулы урындарҙа эшләгәндәр генә зарланһа, бөгөн йәштәрҙең дә ауыҙынан бындай һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Тик ни өсөн?Нимә үҙгәрҙе һуң?

Кеше ҡолағы өсөн 20 -30 децибел(дБ) йышлыҡындағы тауыш ғәҙәти, зыянһыҙ тип һанала. Мәҫәләң, япраҡ шыптырлауы - 10-20 дБ. Кешеләр үҙ -ара аралашҡандағы тауыш 40-50 дБ-гә тиң. Тимәк, яҡынса 50-55 дБ тауыш йышлығын да зарарһыҙ тип ҡарарға була.

Беҙгә көн һайын ишетергә тура килгән автомобилдеке —70 дБ. Мотоциклдыҡы - 86 дБ булһа, автобустыҡы—91! Ә медицина белгестәре әйтеүенсә, әгәр ҡолаҡтарға өҙлөкһөҙ рәүештә 80 дБ тауыш тәьҫир итеп торһа, һаңғырауланыу процессы башлана. Әйткәндәй, 130 дБ тауыштан беҙҙең ҡолаҡта физик ауырыу барлыҡҡа килһә, 150-лә — түҙеп торғоһоҙ ауыртыу булһа, хатта кешенең иҫен юғалтыуы ла ихтимал.

1.Прочитайте текст
2.Переведите 1-й абзац.
3.Переведите числительные в тексте.

«Аманат» энциклопедияһы. Бөй-тарантул.

Ҡоро һәм йылы климатта ғына йәшәй алған бөжәктәр хәҙер йыш Башҡортостанда ла осрай башланы. 2011 йылдаӨфө ҡалаһында урынлашҡан банкоматтың техник ярығында богомол йәшеренеп ултырған була. Аргиопа тигән үрмәксе лә тап була баш ҡалала . Белгестәр аптырарлыҡ урын юҡ тип тыныслandыра. Был сәйер «ҡунаҡтар»ҙың беҙгә килеүенә уңайлы һауа торошо шарттары сәбәпсе, тип бара республика заологтары. Уларҙы беҙгә аҙыҡ-түлек, йәшелсә-емеш, төрлө ҡоролмалар, автомобилдәр менән индереүҙәре бар.

Ә бына ҙур үрмәкселәрҙең бер төрө булған, көньяҡта йәшәгән бөйҙәрҙең (фәнни исеме-тарантул) Башҡортостаныбыҙҙың көньяҡ райондарында ла борон-борондан йәшәүен күптәр белмәйҙер.

Тарантулдар республикабыҙҙың Хәйбулла, Баймаҡ Йылайыр районында күпләп тараған. Ҙурлығы шырпы ҡабындай. Бөйҙәр тик ерҙә генә йәшәй. Өң яһап, ерҙә оялайҙар. Бөй саҡһа, кешенең температураһы күтәрелә, йәрәхәт алған урын ныҡ булып шеша, аллергия башлана. Әммә Башҡортостанда ла, бүтән ерҙә лә бөй ағыуынан үлем осраҡтары теркәлмәгән.

Тарантулдар (ҡап төрҙәре бар) ағыулы үрмәкселәр ғаиләһенән. Оҙонлоҡтары 3,5 сантиметрға етә. Ҡоро дала һәм сүплектәрҙә йәшәйҙәр. Көндөҙ тәрәнлеге 60 сантиметрға еткән ер аҫты өңдәрендә йәшеренәләр, төндә ер өҫтөнә бөжәктәргә һунар итергә сығалар.

1.Прочитайте текст, переведите 4 –й абзац.
2.Переведите выделенные слова и определите число, падеж.

Ҡорманай мәмерйәһе

Ауырғазы районы үҙәге булған Талбазы ауылы эргәһендә баш алған Ауырғазы йылғаһы-бик үҙенсәлекле йылғасыҡ. Түбәндәге ағымдарында, Өршәк йылғаһына ҡойор алдынан, ул йырҙаһын гипс ҡатламдары аша һала, шуға ла унда төрлө мәмерйәләр хасил итә.

Шуларҙың береһе – Ҡорманай ауылы эргәһендәге Ҡорманай мәмерйәһе. Был мәмерйә тураһында хатта 1770 йылда уҡ академик Иван Лепехин иҫкә ала.

Бер нәкъ ауыҙы булған Ҡорманай мәмерйәһе төрлө ҙурлыҡтағы бик күп лабиринттарҙан тора. Ә бер ауыҙы хатта Ҡорманай ауылындағы бер йорттоң баҡсаһында тороп ҡалған. Был урында Ауырғазы йылғаһы ҡасандыр мәмерйә эсенән аҡҡан һәм уның түбәһе ишелеп төшөү сәбәпле, тәрән йырын барлыҡҡа килтергән. Йырын эсендә Бабай таш, Тишеклетау, Ҙур Аҡташ тигән ҡыҙыҡ формалы ҡаялар бар.

Мәмерйәнең дөйөм оҙонлоғо 150 метр самаһы иҫәпләнә, уның эсендә тоҙло күлдәр ҙә бар.Ололар һөйләүенсә, борон Ҡорманай ауылынан Солтанморат ауылына тиклем(6 саҡрым) ер аҫтынан барып сығырға мөмкин булған.

Ҡарлыман мәмерйәһе

Ҡарлыман мәмерйәһе Башҡортостанда иң оҙон гипс мәмерйәһе һанала. Был горизонталь мәмерйә Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыман ауылы янында Сағыл йылғаһы үҙендә ятҡан Олотауҙа урынлашҡан.Ағиҙелгә ҡойған Ҡарлыман йылғаһын Ҡоро Ҡарлыман тип тә күрһәтәләр. Сөнки ул урыны-урыны менән ер аҫты ҡыуышлыҡтарында юҡҡа сыға лә ҡуя.

Ҡарлыман мәмерйәһе сағыштырмаса йәш һанала. Шулай ҙа ул, гипс ҡатламдарында ятыуы аркаһында, тиҙ емерелеүгә дусар.Уның ике ауыҙы булған, әммә берәһе (зурырағы) хәҙер инерлек түгел. Ололар һөйләүенсә. мәмерйәгә һыбай ҙа инерлек булған.Әле эстә йөрөй алырлыҡ оҙонлоғо 198 метрға етә. Күрәһең, ул элек ғонораҡ булғандыр. Иҙәне тигеҙ. Шыйыҡ балсыҡ менән ҡапланған.

Мәмерйә тирәһе кәртәләп алынған. Тик ишек алды ҡаялары туристарҙың ”автографтары” менән сыбарланып бөткән.

Леонардо да Винчи

Леонардо да Винчи 1452 йылдың 15 апрелендә Винчи янында Анҡиано ауылында тыуа. «Шөмбе, төнгө сәғәт өҫтә ейәнем—улым Пьероның улы тыуҙы. Малайға Леонардо тип исем ҡуштыҡ. Уны отец (дин әһеле) Пьеро ди Бартоломео суҡындырҙы», олатаһы көндәлегендә шулай тип билдәләп үткән. Уның ата-әсәһе 25 йәшлек нотариус Пьеро һәм уның һөйгән йәре крәҫтиән ҡыҙы Катерина була. Леонардо беренсе йылдарында әсәһе тәрбиәһендә үҫә.

Ул ваҡытта хәҙерге кеүек фамилия булмаған, «да Винчи» фәҡәт

«Винчи ҡалаһынан тигәнде аңлатҡан». Уның тулы исеме — Leonardo di ser Piero da Vinci, йәғни, «Винчи ҡалаһынан Леонардо, Пьеро әфәнде улы».

Хәҙерге заман кешеләренә Леонардо рәссам булараҡ билдәле. Бынан тыш уның скульптор була алыуын да иҫәптән сығарырға ярамай. Да Винчи үҙен инженер һәм ғалим тип һанай. Һынлы сәнғәткә ул бик аҙ ваҡытын бүлә һәм бик әкрен эшләй. Шуға күрә уның һынлы сәнғәттә мираҫы бик күп түгел, күп эштәре юғалған йәки боҙолған. Әммә уның донъя мәҙәниәтенә индергән өлөшө, Италияның Яңырыу дәүерендәге рәссамдар менән сағыштырғанда ла мөһимерәк. Уның хеҙмәттәре аша һынлы сәнғәт яңы үҫеш ала. Леонардонан алда килән Ренессанс рәссамдары урта быуаттар сәнғәтендәге ҡайһы бер шарттарҙан баш тарта. Был реализмға ынтылыш була, перспектива, анатомия, композицияла бик күп алымдар үҙләштерелгән була.

Үҙе йәшәгәндә, бирҙән бер танылған, уйлап сығарған әйбере — пистолет ҡабыҙыу замогы. Был механизм XVI быуат урталарында киң тарала, юғары кимәлдә булыу сәбәпле хатта XIX быуатта ла осрай.

Леонардо да Винчи «осоу» мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһына. Миланда бик күп рәсемдәр яһай һәм ҡоштарҙың осоу механизмын өйрәнә. Бынан тыш күп һынауҙар үткәрә, уларҙың барыһы ла уңышһыҙ була. Леонардо осоу аппаратын эшләргә теләй.

Баштараҡ, Дедал һәм Икар һымаҡ, ҡанаттар ярҙамында мускул көсө менән осоуҙы өйрәнә. Һуңынан, аппаратҡа кеше беркетелеп ҡуйылырға тейеш түгел, ул ирекле рәүештә аппарат менән идара итергә тейеш, ә аппарат үҙ көсө менән хәрәкәткә килергә тейеш тигән фекергә килә. Асылда был аэроплан идеяһы була. Леонардо да Винчи вертикаль осоу һәм төшөү аппаратын эшләү тураһында уйлай.

Леонардо да Винчи ике линзалы телескоп эшләүҙе лә тәҡдим итә.

Париж

Пари́ж (франц. Paris [ра ки] (пари́)) — Францияның баш ҡалаһы, илдең мөһим иҡтисади һәм мәҙәни үҙәге. Ул Франциянының урта өлөшөнөң төньяғында, Иль-де-Франс төбәгендә, Сена йылғаһы буйында урынлашҡан. Париж халыҡ-ара әһәмиәткә эйә — унда ЮНЕСКО, OECD һәм Халыҡ-ара сауҙа палатаһының штаб-фатирҙары урынлашҡан.

Франция баш ҡалаһын күп төрлө мәҙәниәттең осрашыу урыны тип атарға мөмкин. Мәҫәлән, 1999 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса, Париж халҡының 19,4%-ы сит илдәрҙә тыуған. 4,2%-ы 1990—1999 йылдарҙа күсеп килгән иммигранттар, күбеһе Ҡытайҙан һәм Африканан киләндәр. Парижлыларҙың 15% -ы — мосолмандар. Беренсе тапҡыр көслө иммиграция 1820 йылда була, ҡасан Алманияла башланған ауыл хужалығы көрсөгөнән ҡасып, бик күп алман крәҫтиәндәре күсеп килә. Шул заманда бирле Парижға киң күләмдә күсеп килеүҙәр йыш ҡабатлана, XIX быуатта Үҙәк Европанан итальяндар һәм йәһүдтәр, 1917 йылғы инҡилаптан һуң Рәсәй Империяһы граждандары, ике Бөтә донъя һуғышы араһында поляктар, һуңыраҡ элекке француз колонияларынан — яңы бойондороҡһоҙ дәүләттәрҙән этник француздар, 1950—1970 йылдарҙа испанлылар, итальяндар, португалдар, Магриб, Көньяҡ -көнсығыш Азия илдәренән сығыусылар һ.б. күсенәләр. Иммигранттарҙың йәшәү урындары ғәҙәттә уларҙың сығыштарына бәйле. Мәҫәлән, Африканың ҡара тәнле иммигранттары ҡаланың 18-се һәм 19-сы округтарында (бигерәк тә, Шато Руж биҫтәһендә) йәшәйҙәр, ә Бельвиль биҫтәһендә — Ҡытайлылар һәм төньяҡ Африканан килеүселәр. 13-сө округ үҙенең Ҡытай биҫтәһе менән данлыҡлы, ә американлылар аристократтар төпләнгән 16-сы округта йәшәйҙәр.

1.Прочитайте текст.
2.Проанализируйте 3 глагола из текста.

Бәрәңге

Бәрәңге-күп йыллыҡ, тамырындағы бүлбеләренән (бәрәңгеләренән) үҫә тоған культуралы үҫемлек; эт карағаттары ғаиләһендәге эт ҡарағаты нымӑктар ырыуынан күп йыллыҡ бүлбеле үҫемлек; крахмаллы йәшелсә культураһы. Аҙыҡ, мал аҙығы булараҡ һәм техник мӑксаттарҙа үҫтерелә.

Был үҫемлекте Көньяҡ Америка индейҙары бынан ун дурт мең йыл элек уҡ белгәндәр. 1565 йылда ул Испанияға килтерәләр. Һуңыр аҡ инглиз моряктары уны Бөйөк Британияға алып ҡайталар. 1740 йыл тирәһендә «икенсе икмәгебеҙ» Германияла, Италияла, Бельгияла, Франция̆ла күренә башлай. Шулай за яңы, ят культура үҙенә юлды тиҙ генә таба алмай әле. Ҡатын-ҡыҙҙар уның сәскәһен биҙәнеү өсөн сәстәренә ҡаҙаған. Күп кенә илдәрҙә уны «шайтан алмаһы» тип тә йөрөткәндәр. Уны үҫтереү гонаһ тип һаналған.

Франция̆ла аптекарь Пармантье "ер алмаһы"н үҫтереүгә күп көс һала. 1785 йылдың августында ул Людовик XVI картуфтың сәскә аткан һабағынан яһалған гөлләмә не һәм бер кәрзин өлгөргән уңышты бүләк итә. Картуфты шул ук көндө бешереп, королдең өҫтәленә ҡуялар. Шул мәлдән инде был ризыҡҡа ҡараш үҙгәрә. Ул табындарҙа ныҡлы урын ала.

Рәсәйҙә картуф үҫтерә башлау Пётр I исеме менән бәйле. Ул Голландияла сағында Рәсәйгә бер тоҡ картуф ебәрә. Әммә Пётр I заманында картуф киң таралмай. 1765 йылда Екатерина II сит илдән картуф һатып алыу һәм Рәсәйҙә таратыу тураһында указ сығара. Рәсәйҙә картуф тиҙ генә таралмай, халыҡ картуфтың алмаһын ашап күпләп ағыулана.

Хәҙер халыҡ уны «икенсе икмәк» тип йөрөтә. Картуфтан 300 -ҙән ашыу төрлө ризыҡ әҙерләргә мөмкин.

Аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә бәрәңгенән крахмал, киптерелгән һәм ҡыҙырылған бәрәңге (чипсы), бәрәңге боламығы, һыуытылған бәрәңге (гарнир өсөн, биточки, котлет һ.б.), бәрәңге лачауы, саго һ.б. етештерлә.

Аниме

Аниме — япон анимацияһы. Балалар өсөн яһалған башҡа илдәр йәнһүрәттәренә ҡарағанда, аниме күп осраҡта үҫмерҙәр һәм өлкәндәр өсөн ҡаралған, шуға күрә донъяла

киң билдәле. Персонаждарҙы һәм тирә-йүнде үҙенсәлекле итеп төшөрөү менән айырыла. Телесериалдар, киң тамашасы өсөн фильмдар рәүешендә сығарыла. Сюжеттары күп төрлө персонаждарҙы ҡылыҡһырлап, урындары, дәүерҙәре, жанр һәм стилдәре менән айырыла.

Аниме-сериалдар өсөн сығанаҡ итеп манга (япон комикстары), ранобэ (лайт-новел), йәки компьютер уйындары (йыш ҡына «визуаль роман» жанрында) алына. Экранлаштырғанда төп нөсхәнең график стиле һәм башҡа үҙенсәлектәре һаҡлана. Һирәгерәк башҡа сығанаҡтар, мәҫәлән, классик әҙәбиәт әҫәрҙәре алына. Шулай уҡ тулыһынса үҙенсәлекле сюжетлы аниме ла була (был осраҡта үҙе аниме китап һәм манга сығанағы була ала). «Аниме» термины мәғәнәһе контекстҡа ҡарап үҙгәрә. Көнбайыш илдәрҙә аниме мәҙәниәтсе, социолог, антрополог ғалимдары – Эри Идзава, Скотт Маклауд, Сьюзан Напьер, Шерон Кинселла һ.б. — тарафынан өйрәнелә.

1.Прочитайте текст.
2.Переведите выделенные слова и словосочетания.
3.Проанализируйте глагол *Айырыла*.

Әбүғәлисина

Әбүғәлисина Бохарала бай кеше ғаиләһендә тыуа. Уның атаһы белемле, мәртәбәле зат булып, улын да үҙенең мәсләге йүнәлешендә тәрбиәләргә тырыша. Әбүғәлисина ун йәштә үк Ҡөрьәнде яттан белеүгә ирешә. 985-996 йылдарҙа Бохаралағы башланғыс мәктәптәренең береһендә укый; һуңыраҡ өйөндә белем ала — математика, физика, логика, астрономия, философия һ.б. фәндәрҙе өйрәнә. Ғәрәп һәм фарсы телдәрен, уларҙың грамматикаһын 15—16 йәштәрендә уҡытыусыларҙан мөстәкил рәүештә, үҙ иркендә уҡый. Был фәндәрҙе Бохараға килгән ғалим Абу Абдалах Натил менән өйрәнә. Һуңынан 16 йәшлек малай үҙ алдына уҡый. Аристотелдең «Метафизика»һы менән танышҡансы геометрия, астрономия, музыканы өнәл өйрәнә. Үҙенең автобиографияһында был китапты бер ниҙә тапҡыр уҡып сыҡтым, әммә аңламаным тип билдәләп үтә. Әл-Фарибиҙың "Метафизикаға аңлатмалары"н уҡығас ҡына аңлай башлай.

16 әйәлек Ибн Синаны Бохараның әмирен дауаларға саҡыралар. Автобиографияһында: «Ауырыуҙарҙы күҙәтеп, китаптарҙа булмаған белемемде тулыландырып, мин медицинаны өйрәнә башланым, был миңә китаптарҙа булмаған төрлө дауалау алымдарына өйрәтте», – тип яҙа ул.

Исфахан хакименең хәрби походтарының береһендә Ибн Синаның ашҡаҙаны ауырыуы башлана, был сәбәпле ул үҙен дауалай алмай. 1037 йылдың июнендә үлем алдынан васыят яҙҙыртып ҡалдыра. Ошо васыятҡа ярашлы үҙенең бөтә милкен ҡолдарына һәм ярлыларға таратып бирергә, ҡолдарына ирек бирергә ҡуша.

Әбүғәлисинаны Хамадон ҡалаһы стенаһы янында ерләйҙәр, һигеҙ айҙан һуң мәйетте Исфаханда әмир кәшәнәһендә яңынан ерләйҙәр. Ибн Сина тикшереү нәләте көслө булған ғалим була, ул бөтә энциклопедик белемде солғап ала. Философ булараҡ ул феноменаль хәтер һәм үткер фекерләү эйәһе була.

Әбүғәлисина 29 фән өлкәһендә 450 хеҙмәт яҙып ҡалдыра. Беҙҙең көндәргә тиклем 274 хеҙмәте һаҡланған. Күп төрлө фән өлкәһендә: медицина, философия, ботаника, геология һ.б. ҙур әһәмиәтле хеҙмәттәр яҙа. Уның ғүмере медицинаға арнала. Медицина фәнен үҫтереүгә көп көс һала: бик күп аурыуҙырҙы өйрәнә, хирургик операциялар тәҡдим итә, ауырыуҙарҙы булдырмаҫ өсөн файҙалы кәңәштәр биреп ҡалдыра.

Һыу

Һыу (водород оксиды) — тәүторош хәлендә төҫө, тәме һәм еҫе булмаған үтә күренмәле шыйыҡса. Химик формулаһы: H2O. Температураһы Цельсий буйынса 0 градустан түбән төшһә, ҡаты рәүешкә инә, туңа. Һыу туң хәлдә боҙ, ҡар, бәҫ тәшкил итә. Температураһы Цельсий буйынса 100 градусҡа күтәрелһә, ҡайнап сыға һәм буыға әйләнә.

Ер йөзөнең 71 % тирәһе һыу ятҡылыктары менән ҡапланған. Улар океан, диңгеҙ, йылға, күл, боҙлоҡтарҙан тора.

Һыу көслө иреткес. Тәбиғи хәлдә Һыуҙа һәр ваҡыт иригән матдәләр бар.

Ер йөҙөндә һыу төп йәшәү сығанағы булып тора. Һәр бер тере йәндең һәм үсемлектең химик төҙөлөшөнә инә, тирә-яҡ мөхиттең торошон билдәләй.

Тере кешенең тәнендә 55–78 % һыу бар, уның күләме кешенең йәше һәм ауырлығына бәйле. Кеше организмында 10% һыу юғалтыу үлем осрағына килтереүе мөмкин. Тәндә һыу күләмен бер кимәлдә тотоу өсөн кешегә көнөнә яҡынса 3 литр һыу эсергә кәрәк.

Һыу Ер йөҙөндә өс агрегат хәлдә булыуы мөмкин – шыйыҡлыҡ, газ хәлендә һәм ҡаты хәлдә. Улар барыһы ла йәнәш булыуы мөмкин, мәҫәлән: һауала һыу буыу һәм болот, диңгеҙҙә һыу һәм айсберг, ерҙә боҙлоҡ һәм йылға. Һыу бик күп матдәләрҙең тәмен ала, үҙендә иретә ала.

Сөсө һыу
Ямғыр һыуы
Диңгеҙ һыуы
Ер аҫтындағы һыу
Минераль һыу
Тоҙло һыу
Эсәр һыу, һыу үткәргестәге һыу
Дистилләнгән һыу, ионһыҙландырылған һыу
Тотонолған һыуҙар
Ямғыр һыуҙары һәм ер өҫтө һыуҙары
Үле һыу һәм Тере һыу — сифаты буйынса әкиәттәге һыу төрҙәре
Изге һыу — дини тәғлимәт буйынса махсус һыу

1.Прочитайте текст.
2.Переведите словосочетания в конце текста.

Бында таштар тарих һөйләй

1930 йылдың 12 сентябрендә Башҡортостанда дәүләт геология хеҙмәте барлыҡҡа килә. Геология эштәре алып барыу һөҙөмтәһендә таш к оллекция материалдары ҡупләп йыйыла. Шуның нигеҙендә 1934 йылда Башҡортостан территориаль геология идаралығы эргәһендә Геология музейы төҙөлә.

1999 йылда БР Министрҙар кабинеты ҡарары менән ул Башҡортостан Республикаһының геология һәм файҙалы ҡазылмалар музейы тип үҙгәртелә.

Музей үҙенең бурысын республиканың ер аҫты байлыҡтары матурлығын данлауҙа, уларҙы һаҡлау дөрөҫ файҙаланыуҙа һәм ҡыҙыҡлы геолог һөнәренә һөйөү тәрбиәләүҙә күрә.

Хәҙерге көндә таш коллекция материалдары музейҙың өс залында урынлашҡан. Витриналарҙа 3000 мең тирәһе тау тоҡомдары, файҙалы ҡазылмалар, минералдар, ташҡа әүерелгән үсемлек һәм хайуан ҡалдыҡтары ҡуйылған.

Музей республика хаҡында һәм килгән ҡунаҡтар араһында зур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Өфөнөң үҙәгендә урынлашыуы ла бик яйлы. Юл төшһә, дуҫтар, һеҙ ҙә инеп сығырға онотмағыҙ.

1.Прочитайте текст.
2.Проанализируйте глаголы.
3.Составьте 3 вопроса по тексту.
4.Перепишите последние 2 абзаца.

23 февраль—Ватанды һаҡлаусылар көнө

Парадокс, әммә 1918 йылға, элекке Рәсәй империяһы биләмәләренә Григориан календарын индерөнгә тиклем Ҡатын-ҡыҙ хоҡуктары өсөн көрәш көнө 23 февралдә билдәләнгән.

Бөгөн иһә ул көн календарҙа ҡыҙыл төҫ менән Ватанды һаҡлаусы көнө тип күрһәтелә. Байрамдың исемен һүҙмә-һүҙ ҡабул итепме, ул әрмелә хеҙмәт итеүсе, йәки әрме бурысын үтәгән ысын ир-аттар көнө тип һанала ла, был көндө бар көслө зат үҙ байрамы тип ҡабул итә.

Уның тарихы нисегерәк һуң? Большевиктарҙың партия идеологтары риүәйәте буйынса, яңы социалистик армия 1918 йылдың 23 февралендә, Псков менән Нарва эргәһендә Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл армияһының отрядтары ҡайтанан ойошоп, Германияның Кайзер ғәскәрҙәрен кире ҡағыуҙан башланғыс ала.

Һәр илдә тиерлек Ир-егеттәр көнө билдәләнә. Ҡайҙалыр хәрби, ҡайҙалыр дини, ә башҡа бер илдә –Ғаилә йәки атайҙар көнө булараҡ үтә ул. Июлдең өсөнсө йәкшәмбеһе атайҙар көнөн АҠШ, Канада, Англия, Мексика, Төркиә, Ҡытай, Греция, Франция һәм башҡа илдәр байрам итә.

Иң бәхетле ирҙәр Исландияла йәшәйҙер ул. Сөнки бында бер ыңғайы тигәндәй ике көн Ғаилә башлығы һәм Хәрбиҙәр менән кҏҫтиәндәр байрамы һанала. Етмәһә, улар бер-бер артлы килә. 19 ғинуар Ғаилә башлығы көнө: ҡатындар - тормош ипҡштәрен, ә ҡыҙҙар егеттәрен тәбрикләй, бүләктәр бирә. Нәҡ Ғаилә башлығы көнөндә никах теркәү уңышлы һанала.

1.Прочитайте текст.
2.Напишите поздравление на 23 февраля.
3.Составьте план.

Зорбинг-шар эсендә тәкмәс атыу

Бала сағында автомобиль тәгәрмәсенең камераһы эсенә йомарланып кереп ултырып, беҙ бер-беребеҙҙе тау аҫтына тәгәрәтә торғайныҡ.Ул ваҡыттағы кисерештәрҙе әйтеп аңлатырлыҡ түгел: ер менән күк бутала. Өҫ менән аҫ тойғолары юҡҡа сыға...

Баҡтиһәң, шул ваҡыттарҙа уҡ күп бала-саға яратҡан был шөғөл өсөн махсус ҡулайламалар яһай башлаған булғандар икән. Ул зорб тип атала.

Зорб – кешене тауҙан түбән тәгәрәтер өсөн үтә күренмәле шар. Уны 1973 йылда 17 йәшлек француз студенты Жиль Эберсолһай һәм потентлай. Поливинилхлоридтан эшләнгән шарҙың диаметры 3,2 метр, ул 80 кг тарта, эсенә 1,8 метр ҙурлыктағы икенсе шар ҡуйылған. Уныһы тәкмәс атыусыны – зорбонавты урынлаштырыуөсөн ҡулайлама. Шулай уҡ балалар өсөн 2,2 метрлыҡ зорб-шарҙар ҙа бар.

2009 йыл был мажаралыһәм мауыҡтырғыс шөғөл Өфөгә лә килеп етте.Уны баш ҡаланың «Аҡ йорт» тау саңғыһы базаһында һынап ҡарарға мөмкин.

Зорбингтың төрҙәре күп:
хиллзорбинг–тауҙан түбән тәгәрәү;
гидрозорбинг–һауа урынына һыу тултырылған шарҙа тәгәрәү;
аквазорбинг–һыу өҫтөндә шарҙа тәгәрәү;
сноузорбинг–ҡар һәм боҙ тауҙарынан шарҙа тәкмәс атыу;
аэрозорбинг–аэроторба эсендә шарҙа тәкмәс-түкмәс килеү.

Әлбиттә, ныҡлы материалдан эшләнгән шар ниндәй хәүефһеҙ булмаһын, бейек-бейек тауҙарҙан, шарлауыҡтарҙан ырғый-һикерә аҫка тәкмәсләү өсөн сәләмәт организм кәрәк. Ә бына үтә күренмәле шар эсенә инеп урынлашып, бер нисә тапҡыр тәкмәс атып ҡарау мөмкинлеген һәр кем һынай ала.

1.Прочитайте текст.
2.Переведите выделенный отрывок текста.
3.Выпишите числительные+существительные.

Был ҡыҙыҡлы — Это интересно

Ҡош һөтө

Күпселек ҡоштар – бик ҡайғыртыусан ата-инә. Тап бына уларға һөт кәрәк булған да бит! Кеше ышанҡыһыҡ булып тойолһа ла, ҡош һөтө – шулай ҙа бар нәмә. Ул күгәрсендәрҙә генә була. һөт тигәнебеҙ – аҡһыл шыйыҡса – күгәрсендәрҙең бөрләтәүендә уның стеналарының үҙенә бер төрлө үҙгәреүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

Күгәрсендәр балаларына шул һөткә сылатылған иген бөртөгө ашаталар. Ата һәм инә күгәрсендәрҙең икеһенең дә һөттәре була, улар икеһе лә балаларын ашата ала. *(Б. Сергеев.)*

«Рис» (инглизсә rice) һүҙе Рәсәйҙә XIX быуат аҙаҡтарын -да ғына ҡулланышҡа инә. Быға тиклем рис сарацин бойҙайы тип йөрөтөлә.

Һарымһаҡтың 25% шәкәрҙән тора.

Әгәр ҙә ананасты тоҙлаһаң, ул тағы ла шәрәбәтерәк була. Был бик ябай аңлатыла: тоҙ «ананас» кислотаһын юҡҡа сығара.

Беренсе SMS-ты 1993 йылдың декабрь айында Vodafone компанияһының инженеры Нейл Пэпуорс үҙенең коллега-ларына ебәрә.

Электрон почта адрестарында ҡулланылған«@» билдәһе XV -XVI быуаттарҙа испан, португал, француз телдәрендә үлсәү берәмеге арробаны белдергән. 1 арроба 12-13 кг тигеҙ булған.

Арро́ба (исп. arroba) — ҡыҫҡартып @ символы менән белдерелә. Ғәрәп һүҙе ар-руб‘ (الربع), сирек, дүрттән бер өлөш тигәнде аңлата

Беренсе стюардесса американка Эллен Черч. 1930 йылға тиклем фәҡәт стюардтар ғына булған.

Донъяла иң ныҡ таралған исем – Мөхәммәт.

Гаитила бөтөнләй «эшләү» һүҙе юҡ, ләкин «яратыу» һүҙенең 8 синонимы бар икән.

Русса товар (өрки һүҙе — tavar, tauar) һатырға тәғәйен -ләнгән әйберҙе аңлатҡан. Товарҙы оҙата йөрөгән кешеләр товарищ тип аталған.

Авиа́ция һүҙенең нигеҙен латын һүҙе avis тәшкил итә. Avis ҡош тигәнде аңлата.

Һиндостанда, Японияла ҡара төҫ – шатлыҡ төҫө. Сөнки был төҫ – ер-әсәнең төҫө.

«Фига» күрһәтеү Бразилияла «хәйерле уңыштар» тигәнде аңлата.

Йәйғорҙағы төҫтәрҙе төрлө илдәге кешеләр төрлөсә күрә икән. Ҡытайҙар 5, Америкала йәшәүселәр 6 төҫ, тип әйтәләр. Рәсәйҙә йәшәүселәр йәйғорҙа 7 төҫ күрәләр.

Миг (күҙ асып йомғансы) – был фактик ваҡыт берәмеге. 1/100 секундҡа тиң.

Фамилияға иң ярлы ил Ҡытай икән. Бөтә Ҡытай халҡына 200-гә яҡын фамилия, ти.

Бер йылда 31 557 600 секунд

… серәкәйҙәрҙең теше бар. Микроскоп аша 22 теш күреп була, тиҙәр.

Ер шарындағы тере йән эйәләренән фәҡәт кеше генә арҡаһында йоҡлай ала!

Бер тоннакағыҙ кире эшкәртелһә, 17 ҙур ағас, 26 мең литр һыу, 3 кубометр уңдырышлы ер, 240 литр яғыулыҡ, 4000 киловатт-сәғәт электричество һаҡлана.

100 грамм бал йыйырҙсөн бал ҡорто 46 мең километрға тиклем араны үтә. Был ер шарын экватор буйлап үтеп сығыуға тиң.

«Абракадабра» тигән магик форм ула боронғо еврей телендә: «нисек әйтелгән, шулай булһын» (пусть все будет, как сказано) тигәнде аңлатҡан. Урта быуаттарҙа был һүҙҙе тапма, биҙгәк ауырыуын әмәлләгәндә ҡулланғандар.

Өкөләр баштарын 270° тиклем бора ала тип билдәләгәндәр ғалимдар.

ГУГЛ-да 241543903 һанын эҙләргә ҡушып, Картинки тигәнгә баҫһаң, һыуытҡыс эсенә башын тыҡҡан кешеләр күренә икән!

Киттың йөрәге бер минутҡа 9 тапҡыр тибә икән.

Бегемоттың һөтө алһыу төҫтә тиҙәр

Трискаидекафобия – 13 һанынан ҡурҡыу ауырыуы имеш

Эскимостарҙың телендә «кисәге» һүҙе юҡ!

Цельсий буйынса 718 градус — тамуҡтағы температура. Быны ғалимдар Бибилиялағы цитаталарға нигеҙләнеп иҫәпләп сығарғандар

Оклахома штатында: Эт ашаған мискәнән ашарға ярамай, закон рөхсәт итмәй...

Одеколон – француз һүҙе. О де колон «кёлн һыуы» (кёльнская вода) тиҙнде аңлата. XVIII быуатта Джовани Фарина Кёльнкалаһында хуш еҫле һыу һатыу магазины аса, үҙе булдырған хуш еҫле һыуҙы ошо ҡала исеме менән атай.

Лимузин һүҙенең тәүге мәғәнәһе балахон тигәнде аңлатҡан. Франция́ла көтөүселәр был плащты ямғырҙан һаҡланыр өсөн ябынып йөрөгәндәр.

Бөтә ауырыуҙарҙың 90% проценты туҡтауһыҙ стрестан барлыҡҡа килә.

Бала тыуғас та туған теленең интонацияһында илай, тип иҫбатлағандар ғалимда

Банан ағасы, ысынбарлыҡта, емеш ағасы түгел, ә гигант үлән. Ә́ емеше – еләк.

Страустың күҙе мейеһенә ҡарағанда ҙур.

Апельсин һүҙе XVI быуатҡа тиклем телмәрҙә бөтөнләй булмаған. Португалдар Ҡытайҙан һары тәмле йомро нәмә алып ҡайтҡып һата башлағандар. Голланд телендә алма – appel, ҡытайса – sien. Йәғни appelsien – алмаалма.

Колибри артҡа оса ала торған берҙән бер ҡош, тиҙәр.

Ҡулланылған әҙәбиәт / Использованная литература:

Учебник «Башҡорт теле» для русскоязычных школ учащихся 5 -х классов /под редакцией Усмановой М. Г., Габитовой З. М. / Уфа, 2014.

Учебник «Башҡорт теле» д ля русскоязычных школ учащихся 6-х классов /под редакцией Усмановой М. Г., Габитовой З. М. , Абдулхаевой Г.Н. / Уфа, 2010.

Учебник «Башҡорт теле» для русскоязычных школ учащихся 7 -х классов / под редакцией Усмановой М. Г., Габитовой З. М. / Уфа, 2007.

Учебник «Башҡорт теле» для русскоязычных школ учащихся 8 -х классов под редакцией Усмановой М. Г., Габитовой З. М. Уфа, 2008.

Учебник «Башҡорт теле» для русскоязычных школ учащихся 9 -х классов /под редакцией Усмановой М. Г., Габитовой З. М. / Уфа, 2009.

Абубакирова З.Ф. Башкирский язык в таблицах, схемах и определениях. / Уфа, 2009.

Журналы «Аҡбуҙат» и «Аманат» (2009-2015гг.), газета «Йәншишмә»

Интернет-сайты («Башҡорт википедияһы», Русса-башҡортса һүҙлектәр)

Һүҙлектәр — Словари

Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Өфө, 2002.

Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томда. 1-се том. М., 1993.

Башҡорт теленең һүҙлеге. 2 томда. 2-се том. М., 1993.

Башҡортса-русса һүҙлек . М., 1996.

Башҡортса-урыҫса. урыҫса-башҡортса халыҡ медицинаһы терминдары һүҙлеге. Өфө, 2005.

Йөкмәткеһе / Содержание

Башҡорт алфавиты. Башкирский алфавит..... 3

Башҡорт телендә өн һәм хәрефтәрҙе төркөмләү.....
Классификация букв и звуков в башкирском языке..... 4

Исемдәрҙең күплек ялғауы. Окончания множественного
числа имен существительных..... 5

Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Склонение имен
существительных..... 6

Эйәлек төшөнсәһе. Обозначение принадлежности 7

Һүҙ төркөмдәре. Части речи..... 8

Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре. Глагол. Наклонение
глагола..... 9

Ябай һөйләмдә һүҙ тәртибе. Порядок слов в простом
предложении..... 15

Сингармонизм законы. Закон сингармонизма 15

Алмаш. Местоимение..... 16

Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Склонение
личных местоимений..... 17

Һандар. Числа..... 18

Эш өсөн текстар. Тексты для чтения..... 30

Был ҡыҙыҡлы..... 40

Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге..... 42

Учебно-методическое пособие

В помощь ученикам

Закирова А.Г., Нәҗербаева Л.С.

Печатается в авторской редакции

Подписано в печать 10.02.2016.
Формат 60/84 $^{1}/_{16}$. Усл.-печ. л. 2,56.
Гарнитура «Times New Roman».
Тираж 300 экз.
Отпечатано с готового оригинал-макета.

Издательство УГНТУ
Российская Федерация, 450062,
Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Космонавтов, д. 1.